**Иглин ауылының урта дөйөм белем биреү 5-се мәктәбендә белем биреү сифатын баһалауҙың эске системаһының контроль үлсәү материалдарына аңлатма**

**2-се класс өсөн туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу предметынан йомғаҡлау контроль эше**

**Контроль эштең тәғәйенлеше**

Контроль – тикшереү материалдар 2-се класс уҡыусыларының туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу предметынан белемдәрен тикшереү өсөн тәғәйенләнгән. Материалдар башланғыс кластарҙа Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптары нигеҙендә төҙөлгән. Улар уҡыусыларҙың туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу предметынан белем кимәлен тикшереүгә, предмет буйынса алған белемдәре һөҙөмтәләре динамикаһын күҙәтергә һәм универсаль уҡыу эшмәкәрлегенең формалашыу кимәлен билдәләргә булышлыҡ итә. Уҡыусыларҙың башланғыс дөйөм белем биреү программаһын үҙләштереүенең йомғаҡлау (һөҙөмтә) баһаһы булып предмет һәм метапредмет һөҙөмтәләргә эйә булыуы тора. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәре лә, яҙма эштәр үткәреү методикаһы ла бик үҙенсәлекле. Шуға күрә, бер яҡтан, контроль-тикшереү эштәр, уларға ҡуйылған баһалар, уҡыусыларҙың башҡорт теленә ҡарата ҡыҙыҡһыныуын уятыу, дәртләндереү, ыңғай ҡараш формалаштырыу сараһы булып торһа, икенсе яҡтан, ул - уҡыусыларҙың белемдәрен тикшереү, баһалау, динамикаһын күҙәтеү, балаларҙың универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереү кимәлен билдәләү. Былар бөтәһе лә уҡытыу-өйрәтеүгә етди ҡараш булдырыуҙы, ижади эшләүҙе талап итә. Контроль эштәр төрлө типтағы күнегеүҙәрҙе тәшкил итә: һүҙҙәрҙе тәржемә итеү, һорауҙарға тулы яуап биреү, төшөп ҡалған хәрефтәрҙе, һүҙҙәрҙе яҙыу, һөйләмдәрҙе, кескәй тексты тәржемә итеү, дөрөҫ яуапты табыу, артыҡ һүҙҙе табыу, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөү, таблицаны тултырыу, дөйөм яуабын табыу һәм башҡалар. Шулай уҡ контроль- тикшереү материалдарының төрлө формалары бирелә: үтелгәндәр буйынса контроль эштәр, текст менән эш диагностикаһы, тест һорауҙары. Контроль-тикшереү материалдары коммуникатив, ябайҙан ҡатмарлыға принцибы буйынса төҙөлгән. Уҡыусыларға телгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, ыңғай мотивация булдырыу маҡсатында йөкмәткеһе, формаһы буйынса ҡыҙыҡлы эш-биремдәрҙән тора. Уҡыусыларға контроль-тикшереү материалдарын ошо уҡ биттәрҙә эшләргә тәҡдим ителә. Биремдәр ике телдә: башҡорт һәм рус телендә төҙөлгән.

Башҡорт телен төрлө кимәлдә белгән уҡыусыларҙы иҫәптә тотоп, ҡайһы бер контроль эш варианттарында йондоҙсоҡ менән өҫтәлмә, йәки, ауырыраҡ кимәлдәге ижади эштәр бирелде. Һәр эште тикшергән саҡта балл системаһын ҡулланыу тәҡдим ителә. Уҡыусыларҙа башҡорт теленә ҡарата ыңғай мотивация, стимул, ҡыҙыҡһыныу булдырыу маҡсатында эштәрҙе баһалау һәм анализлау берҙәм йөкмәтке һәм критерийҙар нигеҙендә булырға тейеш. Контроль-тикшереү материалдарын баһалау, анализлау уҡыусыларҙың ниндәй теманы яҡшы, йәки, насар өлгәшеүен күрһәтә, динамикаһын күҙәтергә, предмет һәм метапредмет һөҙөмтәләрҙе баһаларға булышлыҡ итә.

Эш төрө: тест. Тест 5 эштән тора: 4 төп кимәлдәге эш, 1 юғары кимәлдәге эш. Тест эшен башҡарыуға 40 минут бирелә.

## Баһалау критерийҙары

| № | яуаптар | балл | кимәл |
|---|---|---|---|
| ***1.*** | фил-слон<br>йәнлек-животное<br>ҡолаҡ-ухо<br>кеше-человек | 4 балл, һәр дөрөҫ яуапҡа 1 балл | Төп |
| ***2*** | Фил ҡайҙа йәшәй?Фил йылы яҡта йәшәй.<br>Филдең ҡолаҡтары ниндәй? Филдең ҡолаҡтары ҙур. | 2 балл, һәр дөрөҫ яуапҡа 1 балл | Төп |
| ***3.*** | а) Оҙон мороно менән йөк ташый. | 1 балл | Төп |
| **4** | Ҡарғалар, сыйырсыҡтар, аҡҡоштар, торналар- ҡоштар<br>Фил, арыҫлан, төлкө,ҡуян- йәнлектәр | 2 балл, һәр дөрөҫ яуапҡа 1 балл | Төп |
| **5** | Он живет в теплых странах. | 4 балл | Юғары |

**Контроль эште биш балл системаһы менән яңынан иҫәпләүҙең тәҡдим ителгән шкалаһы**

| Билдә | «2» | «3» | «4» | «5» |
|---|---|---|---|---|
| Балдар | 5-тән кәм | 6-8 балл | 9-11 балл | 12-13 балл |

**Уҡыусыларҙың планлаштырылған укыу һөҙөмтәләренен өлгәшеү кимәле**

| Программаны үҙләштереү | Уңыш кимәле | 5 баллы шкала |
|---|---|---|

| | | |
|---|---|---|
| сифаты | | буйынса билдә |
| 90 - 100% | Бейек | «5» |
| 66 - 89% | Юғары | «4» |
| 50 – 65% | Төп | «3» |
| 49 – 35% | Түбән | «2» |
| 35% кәм | Етерлек түгел | «2» |

**2-се класс өсөн йомғаҡлау контроль эшенең демонстрацион варианты**

Предмет: туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу

Класс: 2-се класс

**Эште башҡарыу буйынса киҫәтмә**

Һинең алда туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу предметы буйынса эштәр. Һәр эште һәм уға яуаптарҙы иғтибар менән уҡы. Дөрөҫ яуапты һайлағыҙ. Зинһар, дөрөҫ яуап бер генә икәненә иғтибар итегеҙ. Әгәр ике яуапты билдәләһәң, эш үтәлмәй тип иҫәпләнә. Әгәр хаталанһаң, хатаны юйып ташла һәм икенсе яуап һайла. Әгәр эште үтәй алмаһағыҙ, киләһе эшкә күсегеҙ. Әгәр ваҡыт ҡалһа, ауырлыҡ тыуҙырған һорауға кире ҡайта алаһың. Тестың бөтә һорауҙарын үтәгәндән һуң, эшеңде тикшер.

Һиңә уңыштар теләйбеҙ!

**1.Тексты иғтибар менән укып сығығыҙ һәм эстәлеген аңларға тырышығыҙ. Внимательно прочитайте текст и попытайтесь понять его содержание**

Фил.

Фил – бик ҙур йәнлек. Ул йылы яҡта йәшәй. Кешеләргә ярҙам итә. Оҙон мороно менән йөк ташый. Филдең ҡолаҡтары ла бик ҙур. Ҡолаҡтары уны эҫенән һаҡлай.

**2. Текст буйынса һорауҙарға яуап бирегеҙ. Бер генә дөрөҫ яуапты билдәләгеҙ. Ответьте на вопросы. Отметьте один правильный ответ.**

1. **Тәржемә итегеҙ. Переведите слова.**
   фил______________________________________
   йәнлек____________________________________

ҡолаҡ________________________________

кеше__________________________________

2. **Һорауҙарға яуап бирегеҙ. Нужно ответить на вопросы.**

   Фил ҡайҙа йәшәй?

   _________________________________________________________________

   Филдең ҡолаҡтары ниндәй?

   __________________________________________________________________

3. **Дөрөҫ һөйләмде тап. Найдите правильное предложение.**

   а) Оҙон мороно менән йөк ташый.

   б) Оҙон мороно менән йөк ташымай.

   в) Оҙон аяғы менән йөк ташый.

4. **Бер һүҙ менән әйтегеҙ. Назовите одним словом.**

   Ҡарғалар, сыйырсыҡтар, аҡҡоштар, торналар_______________________

   Фил, арыҫлан, төлкө,куян__________________________________________

5. **Аҫтына һыҙылған һөйләмде тәржемә итегеҙ. Переведите подчеркнутое предложение.**

_________________________________________________________________________